

*Рәсимә АЙСЫУАҠОВА,*
*уҡытыусы*

# ИРӘНДЕК ҠЫҘЫ

«Ил бизәге — ҡатын-ҡыҙ» ти халыҡ мәҡәле. Милләтебеҙҙең боронборондан ил тотҡаһы, ил бизәге булған оло рухлы, киң күңелле, сая ҡыҙҙары бихисап. Бындай гүзәл заттар — тормош тотҡаһы, ир-егетте батырлыҡҡа этәреүсе көс, илһам сығанағы, изге әсә һәм һөйгән ҡатын да. Улар бик үк ябай булмаған бөгөнгө шарттарҙа ла үҙҙәренә генә хас нескә тойғолары менән һиҙемләп, яңылыҡҡа юл яралар, йәмғиәтебеҙҙең төрлө тармаҡтарында эшләйҙәр.

Сал Ирәндек буйҙарының саф һауаһын һулап, халҡының күңел байлығын йөрәгенә һеңдереп үҫә Минзә Исҡужа ҡыҙы Латипова. 1951 йылдың йәмле июль айында төҙөүсе ғаиләһендә донъяға килә ул. Атаһы Ҡотлогилдин Исҡужа ғүмерен таусылар ҡалаһы Сибайҙы төҙөүгә арнаған. Төҙөлөш ойошмаһында прораб булып эшләй. Минзә үҙенең атаһын изге күңелле, бай тәбиғәтле, ябай хеҙмәт кешеһе итеп хәтерләй. Өс малай араһында яңғыҙ ҡыҙын Исҡужа ағай бигерәк тә яратҡан. Үкенескә ҡаршы, ул иртә донъя ҡуйған.

Әсәһе Ғәрифә апай йомшаҡ күңеле, мәрхәмәтлелеге, үткер аҡылы менән айырылып тора. Ул балалар баҡсаһында эшләй, дүрт балаһына күңел йылыһын биреп үҫтерә. Оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, әле лә уңған йорт хужабикәһе, иманлы, дин йолаларын теүәл үтәй. Бөхтә йыйыштырылған йортҡа күңелле балалар тауышы тағы ла йәм өҫтәй, өләсәй булған кешегә шуны күреү үҙе оло бәхет түгелме ни?

Минзә лә көн дә әсәһенең хәлен белешеп кенә тора. Ҡустылары Риза, Зыя, Мирза үҙҙәре ғаиләле, балалар үҫтерәләр, апайҙарының кәңәшен тотоп, татыу ғүмер итәләр, килендәре лә ҡайынбикәләренә иғтибарлы.

Минзә Исҡужа ҡыҙы — тормош юлында бай тәжрибә туплаған күренекле педагог. Ул Сибай ҡалаһының 1-се урта мәктәбендә белем ала. 1970 йылда ҡаланың медицина училищеһына уҡырға инә. Тиҙ арала үҙен уҡыу алдынғыһы, әүҙем йәмәғәтсе итеп таныта. Йәштәр араһынан уны ҡала советы депутаты итеп һайлайҙар. Уҡыу йортон уңышлы тамамлай. Йәш белгесте комсомол эшенә саҡыралар, туғыҙ йыл комсомолдың Сибай ҡала комитетында эшләй, унан медицина хеҙмәткәрҙәре профсоюзының ҡала комитеты рәйесе вазифаһын башҡара. Бер-

нисә йыл «Белем» йәмғиәтенең яуаплы сәркәтибе була.

Тынғыһыҙ йәмғәтсе илдә барған үҙгәрештәр менән яҡындан ҡыҙыҡһына, үҙенең белемен камиллаштыра. 1984-89 йылдарҙа ситтән тороп Мәскәүҙәге Юғары профсоюз мәктәбен тамамлай. Иҡтисад фәнен үҙләштерә, белемен тәрәнәйтә. Иҡтисадсы табип Сибай һаулыҡ һаҡлау идаралығының статисы вазифаһын башҡара.

1989 йылда Латипова Сибай Уҡытыу-производство комбинатында иҡтисад дәрестәрен индерергә тәҡдим итә. Ул саҡтағы УПК директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Хәмитова Фәниә Зәйнулла ҡыҙы униң тәҡдимен ҡуш ҡуллап ҡабул итә. Буласаҡ ташсы, буяусы-биҙәүсе, тегеүсе, автослесарь, һатыусылар иҡтисад нигеҙҙәрен өйрәнә башлай. Ул заманда ҡалала был яңылыҡ була, сөнки иҡтисад фәнен бер мәктәптә лә өйрәтмәйҙәр ине. Минзә Исҡужа ҡыҙы мәктәп эшен заман талаптарына ярашлы, баҙар иҡтисады йүнәлешендә үҙгәртеп ҡороуға ҙур көс һала.

— Иҡтисад реформаһы, баҙар шарттарында уҡый беҙҙең балалар. Улар киләсәктә менеджерҙар, эшҡыуарҙар, иҡтисадсылар буласаҡ. Был төшөнсәләрҙең нигеҙен мәктәптә белеп сығырға, артабан белемдәрен юғары уҡыу йорттарында камиллаштырырға, уны тормошта файҙаланырға тейештәр. Шуны уйлап менеджер синыфтары астыҡ, — тип һөйләй Минзә Исҡужа ҡыҙы.

1992 йылдан мәктәптә бөтә синыфтарҙа ла иҡтисад фәне индерелә. Сибай һәм Урал аръяғы төбәге мәктәптәре өсөн Менеджерҙар мәктәбе иҡтисад фәнен өйрәнеү үҙәгенә әйләнә. Латипова М.И. уҡытыусылар өсөн семинарҙар ойоштора, асыҡ дәрестәр үткәрә.

Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институты тәҡдиме менән йыл һайын төбәк райондарының уҡытыусылары алдында уҡытыу методикаһынан лекциялар уҡый. Ғөмүмән, Минзә Исҡужа ҡыҙы үҙенең эш тәжрибәһен таратыуға бик етди ҡарай. Матбуғат биттәрендә яңы тәҡдимдәр, методик кәңәштәр менән йыш сығыш яһай. Ауыл уҡытыусылары, теләгән ваҡытта килеп, яңы программа, дәреслектәр, әсбаптар һәм методик күрһәтмәләр ала. Уҡытыусының күңеле киң, йөҙө асыҡ, һәр береһенә йылы һүҙ таба, белгәнен ихлас өйрәтә. Уның исеме Урал аръяғы төбәге мәктәптәрендә киң билдәле.



*Минзә Исҡужа ҡыҙы Латипова*

М.И.Латипова үҙ эшендә АҠШта 1919 йылда барлыҡҡа килгән «Юниор Эчивмент» («Йәштәр ҡаҙанышы») ойошмаһының мауыҡтырғыс программаһын ҡуллана. Академик Е.Велихов етәкләгән «Балалар — XXI быуат ижадсыһы» исемле халыҡ-ара фонд инициативаһы менән 1991 йылда «Джи Эй» программаһын таратыу буйынса килешеү төҙөлә һәм уны бөтә Рәсәйҙә өйрәнә башлайҙар. Минзә Исҡужа ҡыҙы ла үҙенең уҡыусыларын мауыҡтырғыс иҡтисад донъяһына алып инә. Балалар үҙҙәренең компанияһын төҙөй, уның менән идара итә, иҫәпхисапҡа, эшҡыуарлыҡҡа беренсе аҙымдарын яһай. Компьютер

уйындарында һәр компания үҙ продукцияһының һатыу хаҡын, маркетинг, фәнни-тикшеренеү сығымдарын иҫәпләй, етештереү ҡеүәтен самалай, иҡтисади кризис һәм күтәрелеш мәлдәрендә тауар хаҡын күҙәтергә өйрәнә. Уҡытыуҙа яңы алымдар, тестар ҡулланыла, уҡытыусы балаларҙың белеменә объектив баһалар ҡуя. Латипованың өлкән синыф уҡыусылары түбән синыфтарҙа иҡтисад дәрестәре үткәрә, зачет ала, ҡала һәм төбәк кимәлендәге конференцияларҙа сығыш яһай, асыҡ дәрестәр күрһәтә.

Минзә Исҡужа ҡыҙы инициативаһы менән 1995 йылда Рәсәй фәндәр академияһының Магнитогорск ҡалаһындағы лицейы менән бәйләнеш булдырыла. Уҡытыусылар лицейҙа үткәрелгән фәнни-ғәмәли конференцияларҙа ҡатнашалар, олимпиадаларҙа үҙҙәрен һынап ҡарайҙар.

1999 йылда ҡала күләмендә БДУ-ның Сибай институты тарафынан үткәрелгән иҡтисад олимпиадаһында Минзә Исҡужа ҡыҙының уҡыусылары бөтә призлы урындарҙы яуланы, ике уҡыусыһы республика олимпиадаһында 10 иң яҡшы иҡтисад белгесе төркөмөнә үтте. 25 уҡыусыһы Рәсәйҙең төрлө юғары уҡыу йорттарына уҡырға инде. 1997 йылда ҡалала беренсе булып Менеджерҙар мәктәбенән Исмәғилев Тимур БДУ-ның Сибай институты ойошторған олимпиадала еңеп, имтиханһыҙ иҡтисад факультетына уҡырға ҡабул ителде, һәм әле тик яҡшы билдәләргә генә уҡый. Шулай уҡ А.Рыбакова, А.Синебрюхова (9-сы мәктәп) ҡабул итеү имтиханын тапшырмай, талип булып киттәләр. Сибай ҡалаһының иҡтисад колледжында ла Латипованың күп уҡыусылары артабан белемен үҫтерә. Балаларҙың дәрестә алған белемдәрен камиллаштырыу маҡсатында һәр аҙнаның бер көнөндә уҡытыусы Сибайҙағы банктарҙа ғәмәли эштәр ойоштора. Башпромбанк, Сбербанк хеҙмәткәрҙәре уҡыусыларға банк операциялары серҙәрен төшөндөрә. Йәй көнө менеджер синыфы уҡыусылары банктарҙа практика үтә, касса операторҙары булып эшләйҙәр.

Уҡыусылар араһында «Менландия» уйыны ойоштоpола. Бөтә мәктәп «Менландия» иленә әйләнә, һәр класс — бер фирма. Был илдең үҙ президенты бар. Хеҙмәт биржаһы, банк, һалым полицияһы һ.б. Һәр бала үҙен ысын эшҡыуар итеп тоя. Уйын аҙағында меналарҙы хисаплап, приздар бирелә.

«Ниңә минең иҡтисадсы булғым килә?» темаһына яҙылған инша авторҙарының барыһы ла иҡтисад дәресен оҡшатыуҙарын белдергән.

Хәҙерге көндә Латипованың элекке уҡыусылары Ильясов Илгиз, Шелихов Сергей, Валькова Оксана, Каширина Инна иҡтисад факультетын тамамлап, банк системаһында эшләйҙәр. Был, әлбиттә, уҡытыусының ижади эш һөҙөмтәһе. Ул үҙе тәрбиәләгән балаларҙа уҡытҡан фәненә һөйөү, ҡыҙыҡһыныу уятҡан, һөнәр һайлауҙа дөрөҫ йүнәлеш биргән. Күпме уҡыусыһы униң һөнәрен һайлаған! Уҡытыусы өсөн шунан да оло шатлыҡ бармы икән?

М.И. Латипова уҡытыу эшен камиллаштырыуҙа яңы ысулдар ҡуллана: БДУ-ның Сибай институтынан иҡтисад фәне кандидаттары А.А. Барлыбаев, Ф.Б. Барлыбаева, Р.А. Таймасов ҡатнашлығында, уҡытыусылар менән берлектә, «Түңәрәк өҫтәл» ойоштора. Яңы уҡытыу алымдарын, программаларҙы, көнүҙәк мәсьәләләрҙе тикшереп, уҡытыусы ғалимдар менән тығыҙ бәйләнештә ижади эшләй.

Иҡтисад нигеҙҙәре башҡа дәрестәрҙә лә бирелә: математика, информатика, тарих, география, психология, реклама һ.б. Бының өсөн М.И. Латипова ҡыҙыҡлы уйындар, эшҡыуарҙар менән осрашыуҙар, ҡала предприятиеларына экскурсиялар ойоштора, уҡытыусылар коллективы алдында яңы тәкдимдәр менән сығыш яһай.